*Раил БАЙБУЛАТОВ*



# КӨЙӨРГӘҘЕЛӘР — МИНЕҢ ЕРҘӘШТӘРЕМ

Күптән түгел Көйөргәҙе районы хаҡында «Тыуған ерем — Көйөргәҙе» исемле документаль әҫәр донъя күрҙе. Был китапты донъяға баҫтырып сығарыуҙа ҡатнашыусы автор булараҡ, тағы ла бер мәртәбә раҫлай алам: йәмле Көйөргәҙе буйҙары — борон-борондан сағыу исемшәрифтәре һәм ҡылған эш-ҡаһарманлыҡтары менән дан алған һоҡланғыс шәхестәргә ифрат бай төбәк. Был ашығыс ҡына яҙылған китапта иң шөһрәтле яҡташтарыбыҙҙың исемдәре һанап ҡына үтелде. Ә уйлап ҡараһаң, уларҙың һәр ҡайһыһы хаҡында айырым-айырым әҫәр яҙырға мөмкин ине. Хәйер, улар яҙылманы ла түгел. Районыбыҙҙың һәр дәүер әҙиптәре тарафынан (был йәһәттән дә районыбыҙға Хоҙай тәғәлә арыу ғына йомартлыҡ күрһәткән — бихисап әҙиптәребеҙ бар) байтаҡ иҫтәлекле әҫәби мираҫ тыуҙырылған. Шулар араһында мин Көйөргәҙе районының данлыҡлы улдары, күренекле башҡорт яҙыусылары Баязит Бикбай менән күптән түгел генә арабыҙҙан киткән Рәшит Солтангәрәевтың, билдәле яҙыусы Ғәлим Хисамовтың яҡташтарыбыҙ хаҡында яҙылған онотолмаҫ очерктарын һәм хикәйәләрен тыуған яҡҡа оло һөйөү өлгөһө итеп телгә алып китер инем. Көйөргәҙе буйҙарының аһәңле моңауаздары ерҙәштәрем Тамара Ғәниева, Зөһрә Ҡотлогилдина, Миңлегөл Хисамова, Зөбәржәт Йәнбирҙина һымаҡ шағирәләребеҙҙең тыуған төйәккә оло һөйөү менән һуғарылған шиғырҙарында, йырҙарында яңы биҙәктәр менән балҡып китә.

Театр донъяһында ифрат ҙур абруй ҡаҙанған һәм драматургия өлкәһендә лә талантлы аҫылын тапҡан яҡташым Илшат Йомағолов йәмле Көйөргәҙе буйҙарының илһам сығанаҡтарын йомарт файҙаланды һәм тос уңыштарға өлгәште. Һуңғы йылдарҙа минең яҡташтарым араһында Марсель Искәндәр, унан тағы Закир Аҡбаров һәм «Тере шишмәләр» әҙәби берекмәһендә ижад ҡомары менән янған башҡа йәш әҙәбиәтселәр ҙә районыбыҙҙың күркәм тарихына, гүзәл тәбиғәтенә һәм уңған кешеләре темаларына әүҙем мөрәжәт итәләр һәм тыуған төйәгебеҙ хаҡында үҙ әҫәрҙәрен тыуҙыралар.

Әлбиттә, Көйөргәҙе районы республикабыҙҙың башҡа райондары менән сағыштырғанда тупраҡ-климат шарттары буйынса уңайһыҙ тарафта урынлашҡан. Дала мөхитенең ауырлыҡтарын көйөргәҙеләрҙең элеккерәк быуындары айырыуса үҙ иңдәрендә кисереп үҫте. Был хаҡта үҙемдең «Дала таңдары» исемле романымда киң юҫыҡта тасуирлағайным инде. Әммә минең әҫәремдең геройҙары һис тә үҙҙәренең әсе яҙмыштарына зарланып ҡына йәшәгән кешеләр түгел, улар көрәшәләр, сынығалар, ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында үҙ бәхеттәрен табырға тырышалар һәм маҡсаттарына өлгәшәләр.

Романдағы Айсыуаҡ образында мин Башҡортостандың күренекле дәүләт эшмәкәре, Яманһары ауылынан сыҡҡан ҙур шәхес, ғалим, һуғышҡа саҡлы Башҡортостан халыҡ комиссары, 1946-54 йылдарҙа



10-2001.p65 25 30.10.01, 14:41

Башҡорт АССР-ы мәғариф министры булған, Башҡорт кавалерия дивизияһының данлы яугиры, ике Ҡыҙыл Байраҡ, Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары һәм миҙалдары, һуғыштан һуң Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнгән, РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, арҙаҡлы яҡташым (уны ауылдашым тиһәм дә була) Сәғит Рәхмәт улы Әлибаевты, ә Зуева образында Бөйөк Ватан һуғышы осоронда һәм һуңынан да Көйөргәҙелә үҙен хеҙмәт батыры итеп бөтә республикаға таныткан, һуғыш ваҡытында көлтә бәйләү буйынса дан ҡаҙанған Анна Николаевна Чуеваны прототип итеп алғайным.

Ошо ике шөһрәтле яҡташым менән беренсе мәртәбә осрашыу тантанаһын һис тә онота алмайым. Сәғит Рәхмәт улы Әлибаевтың тырышлығы менән һуғыштан һуң уның тыуған ауылы Яманһарыла асылған ете йыллыҡ мәктәптең алтынсы класында уҡып йөрөгән мәлебеҙ. Бер ваҡыт ҡышҡы бер кистә мәктәптә артистар концерт ҡуя икән тигән хәбәр таралды. Халыҡ дәррәү йыйылды. Күп тә үтмәй, ауыл лампалары нуры тоноҡ ҡына һибелгән залға бер төркөм ят кешеләр килеп тулды. Баҡһаң, һайлау алдынан Юғары Хөкүмәт органдарына депутат булып һайланасаҡ кандидаттар менән осрашыу була икән.

Сәғит ағай менән Анна Николаевна үҙҙәренең эштәре һәм тормошо хаҡында шунда һөйләгәйне. Беҙ ҙә сер бирмәнек, күмәкләп концерт ҡуйған булдыҡ. Айырыуса Сәғит ағайға уның өсөн таныш һәм көҙерле йырҙы хор менән башҡарыуыбыҙ бик тә оҡшаны:

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды киң Урал.
Ат уйнатып алдан бара
Шайморатов-генерал...

Заманалар үтә торҙо. Сәғит ағай Әлибаев ҡатыны Дарья Васильевна менән ваҡыты-ваҡыты шулай Көйөргәҙе яҡтарына килеп сыҡҡыланы. Улар, ғәҙәттә, Ырымбур яҡтарына юлланғанда, йә Яманһары, йә Яманғол аша үтеп барғанда, халыҡтың хәл-әхүәлен белешеп китәләр ине.

Сәғит ағай менән дуҫлыҡ ологайған һайын нығый барҙы һәм ағай мәрхүм булғансы дауам итте. Күптәр Сәғит ағай Әлибаевты алсаҡлығы, ябайлығы, әҙәм балаларына ярҙамсыллығы өсөн ихтирам иттеләр, айырыуса данлы Башҡорт атлы дивизияһының иҫән ҡалған яугирҙары яҡын күрҙе. Әлекке полк комиссары булараҡ, үҙенең уттыһыуҙы бергә үткән яуҙаштары хаҡында Сәғит ағай «Көндәлек биттәренән» исемле махсус китап яҙып донъяға сығарғайны. Мин бөгөн был яҙмаларҙы алып уҡыйым да Сәғит Рәхмәт улы Әлибаевтың һуғыш көндәлеген ут эсендә нисек шулай бөхтә һәм тәфсирләп яҙып барыуына хайран ҡалам. Ундағы иҫәпһеҙ-һанһыҙ яугирҙар яҙмышын теркәп, хәрби баталияларҙы көн һайын һүрәтләп барыу өсөн ни тиклем үҙеңдең мөҡәддәс бурысыңа бирелгәнлек һәм йәшәүгә, еңеүгә өмөт рухын һүндермәй һаҡлай белеү кәрәк булғандыр инде, тип уйлайым.

Яҡташым Анна Николаевна Чуева менән икенсе осрашыуым йәнә ун биш йылдан һуң булды. Мин был арауыҡ эсендә педагогия училищеһын һәм институтын тамамлап, Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир булып эшләп йөрөй инем. Әлегерәк партия өлкә комитетының идеология һәм пропаганда бүлеге октябрь айы баштарында, партия мәғарифы системаһында уҡыуҙар башланған осорҙа, райондарға махсус вәкилдәр ебәрә торғайны. 1964 йылдың алтын көҙ мәле. Ошо маҡсат менән Көйөргәҙе районына ҡайтып, йөрөй торғас, алдынғы Яҡшымбәт ауылына килеп еттек. Партия уҡыуҙарына әҙерлекте йәһәт кенә тикшергәндән һуң, беҙҙе урта мәктәптә уҡытыусылар көнө айҡанлы ойошторолған кисәгә алып киттеләр. Шунда районыбыҙҙың иң абруйлы етәкселәренең береһе — гөрләп торған «Искра» колхозы рәйесе, Ленин ордены кавалеры, ғәжәйеп баҫалҡы, олпат кеше Тәлғәт ағай Аҙнабаев менән танышҡайным. Ул онотолмаҫ осрашыу һәм кисә һаман күҙ алдымда тора.

Тәлғәт ағай күптән инде гүр эйәһе булды, әммә уның ауылдаштары һәм халҡыбыҙ хаҡына ҡылған изгелектәре һис тә онотолмай. Шуныһы ҡыуаныслы: уның яҡты иҫтәлеген данлы улдары оноттормай, аталарының исемен ҡәҙерләп, һаҡлап, данын ишәйтеп йәшәйҙәр.



10-2001.p65 26 30.10.01, 14:41

Тәлғәт ағайҙың бер улы Марат — бөгөн билдәле доктор, академик, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостандың атҡаҙанған врачы, офтальмологияла үҙенең асыштары, уникаль микрохирургик операциялары менән донъя кимәлендә танылыу алған ҙур белгес. Бер үк ваҡытта ул бына нисәмә йылдар инде ҙур ғилми-тикшеренеү институтына уңышлы етәкселек итә. Тәлғәт ағайҙың икенсе улы Румиль — дәүләт эшмәкәре, ауыл хужалығы белгесе, Башҡортостан Республикаһының Министрҙар Кабинетында эшләй. Уларҙың башҡа туғандары ла нәҫел данын төшөрмәй йәшәйҙәр. Тәлғәт ағай Аҙнабаев менән бөтән күрешергә тура килмәне миңә.

Яҡшымбәттән Кумертауға ҡайтып килгәндә, ун биш йылдан һуң, Анна Николаевна Чуева менән бергә Ҡунаҡбайҙа йәшәгән Хәйрулла еҙнәм менән Зәйнәб апайым табынында йырлашып ултырырбыҙ тип кем уйлаған. Мөләйем, алсаҡ, ябай ғына рус ҡатынының үҙ бригадаһындағы башҡорттар менән бергә тырыш хеҙмәте ул саҡта уҡ киң билдәле ине. Минең апай ҙа уның менән бергә эшләне.

1966 йылда Анна Николаевна Чуева районыбыҙҙың йәнә бер ғәжәйеп тырыш эшсеһе — Таймаҫ совхозының алдынғы һауынсыһы Шәүәли Вәхитов менән икеһе бер көндө Кремлдә хөкүмәт башлығы ҡулынан Социалистик Хеҙмәт Геройының Алтын Йондоҙон һәм Ленин орденын алыу бәхетенә өлгәштеләр.

Шулай итеп, Бөйөк Ватан һуғышында батырлыҡтары менән дан ҡаҙанған яугир-көйөргәҙеләр эстафетаһын хеҙмәт геройҙары дауам итте. Башҡорт халҡының легендар ҡаһарманы, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышында Емельян Пугачевтың һәм Салауат Юлаевтың иң тоғро көрәштәше булған Кинйә Арыҫлановтың тыуаһы, 1940 йылда аҡ финдәргә ҡаршы һуғышта башҡорттарҙан беренсе Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булған Ғәфиәт Арыҫлановтың ҡул арты еңел булғандыр инде. Юғиһә ҡарт олатаһы нигеҙ һалған һәм уның исемен йөрөткән Кинйәабыҙ ауылынан һуңыраҡ, гитлерсыларға ҡаршы үлемесле яу ҡырында, Кинйә Арыҫлановтың тоҡомдарынан йәнә ике Советтар Союзы Геройҙары Сәлмән Биктимеров менән Хәсән Ғайсин сығыр инеме икән! Ҡескәй генә бер ауылда өс Алтын Йондоҙ кавалерҙары тыуыу — бөтә ил кимәлендә был бит уникаль күренеш!

Бөйөк Ватан һуғышының утлы яландарында бөтәһе алты Көйөргәҙе егете Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ булды. Шулар араһында йәнә Морат Ҡужаҡов, Вениамин Недошивин, Анатолий Хохлов исемдәрен оло хөрмәт менән телгә алып йөрөтә минең яҡташтарым. Дан орденының тулы кавалеры Хөрмәт Хәмзә улы Хөсәйеновтың батырлыҡтары менән дә улар һәр саҡ ғорурлана.

Районыбыҙҙың хеҙмәт алдынғыларына килгәндә, миңә үҙ ғүмеремдә улар менән йыш ҡына осрашырға насип булды. Ул иҫтәлекле эңгәмәләр нигеҙендә байтаҡ очерктар, зарисовкалар ҙа ижад итеүе һәм төрлө матбуғат биттәрендә донъя күрҙе.

Миҫал өсөн, үҙ архивымда Көйөргәҙе районының Киров исемендәге алдынғы колхозына оҙаҡ йылдар етәкселек иткән Әфтәх Ишмаев хаҡында яҙылған һәм «Совет Башҡортостаны» гәзитендә донъя күреп, Октябрҙең 60 йыллығы айҡанлы ойошторолған республика конкурсында икенсе премия алған очеркты ҡәҙерләп һаҡлайым. Һәйбәт колхоздың бына тигән етәксеһе хаҡында мәҡәлә яҙыуҙың ни тиклем күңелгә кинәнес һәм ҡыуаныс булғанын шунда татығайным мин. Геройым да ниндәй ине: исеме республикабыҙҙа ғына түгел, бөтә илгә билдәле булған, абруйлы съездарҙа һәм форумдарҙа даими ҡатнашҡан, Ленин, Октябрь революцияһы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары кавалеры Әфтәх Ғәти улы Ишмаев үҙе ине бит. Әгәр ҙә ул ҡапыл ғына йөрәге туҡтап вафат булмаһа, Чуева, Вахитовтарҙан ҡала һис шикһеҙ Социалистик Хеҙмәт Геройы исеменә лайыҡ булыр ине, сөнки ул етәкселек иткән осорҙа Башҡортостандың көньяҡ ҡапҡаһы булған Киров исемендәге колхоз йылдың-йылы ауыл хужалығы продукцияһы етештереү буйынса иң юғары күрһәткестәргә өлгәшеп килде. Бөгөн дә был хужа-



10-2001.p65 27 30.10.01, 14:41

лыҡ А.Ш.Таңатаров етәкселегендә тотороҡло уңыш ала һәм Мораптал ауылының социаль-иҡтисади үҫешен даими тәьмин итә. Морапталдар үҙҙәренең ауылдашы, башҡорт халҡының мәшһүр йырсыһы, күренекле композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың һәм күрше Ҡалта ауылында тыуған һәм Мораптал ауыл мәктәбендә белем алған күренекле яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Баязит Бикбайҙың яҡты иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлайҙар. Бынан бер нисә йыл элек, Башҡортостандың беренсе халыҡ артисы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың 100 йыллыҡ кўркәм юбилейын бөтә республика йәмәғәтселеге ошонда килеп киң билдәләгәндә, Мораптал ауылында Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге крайҙы өйрәнеү музейы асылғайны. Бөгөнгө көндә был мәҙәни усаҡ йәш быуынды халҡыбыҙҙың онотолмаҫ матур традициялары рухында тәрбиәләү буйынса ҙур эштәр атҡара.

Был фани донъяла бер нимә лә эҙһеҙ юғалмай тиҙәр. Бөйөк шәхестәрҙең шөһрәтле эштәре, шул эштәрҙе дауам итеүселәр барыбер халыҡ күңелендә ҡала. Киров исемендәге колхоз рәйесе Әфтәх Фәти улы Ишмаев ана шундай шәхестәрҙең береһе булды. Заманында уның ҡул аҫтында эшләп, бына тигән етәкселәр үҫеп сыҡты. Шуларҙың береһе — Раил Абдулла улы Әбдрәшитов. Башҡортостан ауыл хужалығы институтын уңышлы тамамлап, Морапталда хеҙмәт юлын башлап ебәргән йәш егет тиҙҙән үҙе осо райондың «Таймаҫ» совхозына директор итеп үрләтелә. Ағас емеше менән, әҙәм эше менән тип тиккә генә раҫламай халыҡ мәҡәле. 1975 йылда утыҙ алты йәшлек егет район башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлана. Алда булһа ҙур теләк, эштән ял таба йөрәк, тигән һымаҡ, минең аҙашым Раил шул ваҡыттан алып егерме дүрт йыл буйы тыуған районына етәкселек итте. Ул үҙенең арымаҫ-талмаҫ хеҙмәте менән Көйөргәҙе районының социаль-иҡтисади һәм мәҙәни үҫешенә ифрат тос өлөш индерҙе. Тырышлығы ла уның юғары баһаланды — Раил Абдулла улы күп кенә орден һәм миҙалдарға, «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре», «Көйөргәҙе районының почетлы гражданы» тигән маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булды.

Әхмәт Фәти улының йәнә бер уҡыусыһы — уның мәктәбен үткән элекке колхоз рәйесе Раил Ғөбәй улы Ғисмәтуллиндың да исемен телгә алмаһам гонаһ булыр, сөнки район етәкселеге уны, артҡараҡ ҡалған хужалыҡтарҙы алға тартыу өсөн, ниндәй генә хужалыҡтарҙа колхоз рәйесе итеп файҙаланманы. Ул үҙенең хәләл ефете, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Фирҙәүес Хәлил ҡыҙы менән (ул да Мораптал ҡыҙы) рус ауылы Отрадала йәшәгәндә миңә уларҙың тормошо менән яҡындан танышырға тура килгәйне. Фирҙәүес Хәлил ҡыҙының рус мәктәбендә рус балаларына башҡорт телен, әҙәбиәтен һәм тарихын өйрәтеү буйынса ниндәй ҙур тырышлыҡ күрһәтеүенә шаһит булып киткәйнем ул саҡта.

Ғөмүмән алғанда, Баязит Бикбай исемендәге Мораптал башҡорт урта мәктәбен тамамлағандан һуң төрлө юғары уҡыу йорттарында белем алып, оло тормош юлына аяҡ баҫҡан һәм ҙур танылыу алған шәхестәрҙе, белгестәрҙе, ғалимдарҙы, һәр төрлө һөнәрмәндәрҙе һанап китһәң, үҙе бер оло мәҡәлә булыр ине. Әммә был юлы мин, бүтәндәрҙән ғәфү үтенеп, үҙемә бик тә яҡын һәм таныш Бикҡоловтар ғаиләһе хаҡында ғына бер аҙ һөйләмәксемен. Ғаилә башлығы Талха ағай заманының арҙаҡлы уҡытыусыһы булған, ғүмер баҡый Көйөргәҙелә уҡытҡан. Өлкән улдары Тәлғәт дәүләт педагогия институтының өсөнсө курсында уҡып йөрөгән саҡта Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Йәш егет үҙ теләге менән фронтҡа китеп, тиңһеҙ алыштарҙа һәләк булып ҡала. Икенсе улы — Хөрмәт Бикҡолов республикабыҙҙа киң билдәле яҙыусы-тәржемәсе, нәшриәт хеҙмәткәре булды. Мин уның уңыштары хаҡында бер мәртәбә генә яҙманым, улар төрлө баҫмаларҙа донъя күрҙе. Ғаиләләге өсөнсө бала — бөгөнгө көндә исеме республикабыҙҙа ғына түгел, бөтә Рәсәй күләмендә киң билдәле ғалим-химик, Санкт-Петербург дәүләт университеты профессоры, йәмәғәт эшмәкәре, шағирә Әлмира



10-2001.p65 28 30.10.01, 14:41

Талха ҡыҙы Бикҡолова. Ябай ғына башҡорт ҡыҙының химия фәндәре мөғжизәһенә үтеп инеүе һәм сит тарафтарҙа танылыуы үҙе бер мөғжизә түгелме ни! Әлмира апайҙың иртәрәк арабыҙҙан киткән ике мырҙаһы ла юғары белемле кешеләр ине.

Көйөргәҙе улдары һәм ҡыҙҙарының булдыҡлылығы хаҡында башҡа миҫалдарҙы ла күп беләм мин, сөнки бәғзеләре минә ғүмерем буйы бик тә яҡын юлдаштарым булып йөрөй, һәм беҙ бер-беребеҙҙе һис тә онотмайбыҙ. Шундайҙарҙың береһе — Яманһары ауылы ҡыҙы Нәсимә Хәмит ҡыҙы Мағазова. Ул ифрат ҡатмарлы һәм ауыр тормош юлы үтә. Атаһы Хәмиҙулла бабай мулла булған өсөн ауылдан әллә ҡайҙарға һөрөлөп, хәбәрһеҙ юғалғас, Башҡорт дәүләт педагогия институтының студенткаһы булған Нәсимә бөтә туғандарына ярҙам ҡулы һуҙа. Ул институтта бергә уҡып йөрөгән әхирәте Мәккәрҙең атаһы, миһырбанлы, изгелекле бәндә, Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәмәтша ағай Буранғолов хәстәрләүе менән Әлшәй районына уҡытырға китә һәм әсәһен генә түгел, бәләкәй дүрт туғанын да үҙ янына күсертә һәм бөтәһенә белем алырға ярҙам итә.

Беҙ Нәсимә апай менән осраҡлы рәүештә В.И. Ленин исемендәге балалар йортонда педагогик практика үткәндә танышҡайныҡ. Һуңынан оло йөрәкле был педагог, тормош тарафынан ҡыйырһытылған, ярҙамға мохтаж әҙәмдәргә һәр саҡ миһырбанлы булған тәрбиәсе үҙе ошо балалар йортоноң директоры булып эшләне һәм үҙенән элгәре хужаларҙың булдыҡһыҙлығы арҡаһында көрсөккә килеп терәлгән етемдәр йортон юлға һалыу өсөн әллә күпме тырышлыҡ күрһәтте. Был тәңгәлдә Нәсимә Хәмит ҡыҙына ире — партияның Стәрлетамаҡ ҡала комитетының икенсе секретары, унан халыҡ депутаттарының Стәрлетамаҡ ҡала советы башҡарма комитеты рәйесе булып эшләгән Мирғарифйән Хәмәдиәр улы Мөхәмәҙиев ҙур ярҙам күрһәтте. Һуңынан улар Өфөгә ҡайттылар. Мирғарифйән Мөхәмәҙиев ун ике йыл буйы Башҡорт АССР-ы көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү министры урынбаҫары булып, ә Нәсимә Хәмит ҡыҙы Мағазова Рәми Ғарипов исемендәге 1-се һанлы республика мәктәп-интернатында математика уҡытып хаҡлы ялға сыҡтылар. Уларҙың маҡтауға лайыҡ тормошо хаҡында ла минә яҙырға тура килгәйне.

Бөтә республика өсөн буласаҡ кадрҙар тәрбиәләү бишеге булған Рәми Ғарипов исемендәге гимназия хаҡында һүҙ сыҡҡас, бында сирек быуат буйы математика фәнен уҡытып хаҡлы ялға сыҡҡан йәнә бер яҡташым Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы Әхтәмова хаҡында бер нисә һүҙ әйтмәй булдыра алмайым. Ул бынан ете тиҫтә йыл элек Көйөргәҙе районының Таймаҫ ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтын тамамлағас, үҙ ауылында математика фәнен уҡыта. Унан, юғары белемгә эйә булғас, башҡалаға килеп, бөтә ғүмерен республика интернат-мәктәбендә йәш быуынды тәрбиәләүгә арнай һәм педагогик йәмәғәтселек араһында ҙур абруй ҡаҙана. Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙының «Почет билдәһе» орденына һәм бер нисә миҙалға, йәнә «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы» тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булыуы уның тос хеҙмәт уңыштары хаҡында һөйләй.

Ебәккә ебәк төрөлә, тиҙәр. Бына ахыр сиктә гүзәл яҡташтарымдың исемдәрен һәм уңыштарын бер-береһенә ялғап китһәң, ниндәй күркәм, төрлө сағыу төҫтәр менән балҡыған, дәү аҡландай Көйөргәҙе келәме барлыҡҡа килер ине. Әле яҡындан аралашҡан яҡташтарымдың тормош юлы һәм халҡыбыҙ файҙаһына атҡарған изге эштәре хаҡында артыҡ ҙур мәғлүмәттәр ҙә бирелмәне кеүек. Һис шикһеҙ, мәҡәләмдә телгә алынған һәм алынмаған көйөргәҙеләр хаҡында матур-матур мәҡәләләр, очерктар, зарисовкалар яҙылыр әле, уларға арнап нәҫерҙәр, шиғырҙар ижад ителер. Быға иманым камил, сөнки йәмле Көйөргәҙе, Юшатыр, Туғыҙтимер буйҙарының, был төбәктәрҙә йәшәгән эшсән, тырыш яҡташтарымдың тормошо һәм яҙмышы оло бер хөрмәтләүгә лайыҡ тип йәшәйбеҙ беҙ, ижад кешеләре. Ошо уй-хистәребеҙ мине лә, башҡаларҙы ла бер ҡасан да ташламаһын ине!



10-2001.p65 29 30.10.01, 14:41